*Сүлимйүн БғçРЕТДИНОВ*

# РУХ ҺҮНМӘҺӘ, ИЛ ҮЛМӘҪ

## ШАҒИР ҺҮҘЕ — ЙӘН ҺҮҘЕ

Әҙиптәр, уларҙың әçәрҙәре, китаптары тылсымлы көс һымаҡ күңелде рухландыра, телде байыта, бөткөһөҙ уй-фекер уята. Бер китап меңәрләгән кешене өйрәтә, мәғлүмәтле итә. Силәбе ҡалаһында ошондай ҡөҙрәт сығанағы — Шәйехзада Бабич исемендәге башҡорт-татар китапханаһы. Унда 118 мең китап бар. Шуның 52 меңе — башҡорт-татар телендәге китаптар. Башҡортостанда сыҡҡан башҡортса матбуғат баçмалары ла бар. Бында милли әҙәбиәтте яратҡан кешеләр, Силәбе дәүләт университетының төрки факультеты талиптары йыш килә. Факультетта башҡорт әҙәбиәтен уҡытҡан Флүзә Фәтҡулла ҡыҙы Ғайсинаның әйтеүенсә, китапхана Силәбелә йәшәгән ҡәрҙәштәребеҙҙең аң-белем, мәҙәниәт үҙәге булып тора. Ҡаланың Металлургтар районы халыҡ мәғарифы идаралығының балалар өсөн милли клуб уҡытыусыһы Мәүлиҙә Ғәләм ҡыҙы Мостафина менән дә ошо аң-белем үҙәгендә осрашып һөйләшеп торҙоҡ. Ул эшләгән клубта алты йәштән ун алты йәшкә тиклемге 42 бала өс төркөмгә бүленеп, аҙнаһына 9 сәғәт дәрес ала. Сигергә, ҡайырға, ҡурайҙа, ҡумыҙҙа уйнарға, йырларға, шиғырҙар һөйләргә өйрәнәләр. Китапхананан кәрәкле ҡулланмалар алып торалар. Әле Башҡортостан әҙиптәре менән осрашыуға килгәндәр. Ҡунаҡтарҙы хөрмәтләп, Флүрә һылыу Зарипова гәлсәр тауыш менән башҡорт йыры «Йәйләү»ҙе йырлап ебәрҙе:

Иртәнсәкәй тороп бер ҡараһам,
Уралҡайым ята күренеп...

Силәбе ҡыҙының моңо йөрәкһетеп ебәрҙе. Башҡорт йырының яңғырауы, ҡәрҙәштәребеҙҙе рухландырыуы бик хуп, бик мәслихәт.

Башҡортостан әҙиптәре лә рух усағына ут өçтәп, милләттәштәребеҙҙе баҙлатып тора. Силәбе өлкәһе башҡорттарының II ҡоролтайы алдынан Рауил Бикбаев, Риф Тойғонов, Рамазан Шәғәлиев Сосновка, Красноармейский райондарында, Кәтибә Кинйәбулатова, Әнисә Таһирова, Аçылғужа Баһуманов Ҡоншаҡ, Арғаяш яҡтарында булып, фәһемле осрашыуҙар үткәрҙе. Һөйөнөстәр ҙә, көйөнөстәр ҙә бар. Уларҙы Табын ауылында балаларҙың «Толпар» ансамбле ҡыуандырған. Балалар ҡурайҙа, флейтала уйнай, ун алты халыҡ йырын башҡара. Ҡанатлы толпар талпыныуы ҡыуаныс. Мәгәр күп мәктәптәрҙә балаларҙың урыçса иçәнләшеүе, йәштәрҙең тыуған моңон, телен белмәүе йәндәрҙе өшөткөс. Ярай әле үҙ халҡын ҡурсыған, телен таныған улдар бар. Ҡанбабаларыбыҙ аманатынса, ил хаҡын ир даулар, ир дауламаһа, кем даулар?

Башҡортостандың ир-уҙамандары үҙ яҙмышын ғына түгел, сит өлкәләрҙә донъя көткән ҡәрҙәштәребеҙҙе лә даими ҡайғырта. Мәғариф, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре Силәбе тарафтарына килеп тора, мәктәптәргә, китапханаларға бушлай дәреслектәр, китаптар бирелә. Силәбе балалары, йәштәре Башҡортостандың гимназияларына, юғары уҡыу йорттарына ҡабул ителә... Халҡыбыҙ өсөн янған милләттәштәр айырыуса тыуған телдең яҙмышы өсөн борсола. Сөнки телдән яҙыу йәшәгән ерҙә юғалтыуҙан да ҡурҡынысыраҡ. Мәгәр күренекле шағирәбеҙ Кәтибә апай Кинйәбулатова Шәйехзада Бабич исемендәге башҡорт-татар китапханаһындағы осрашыуҙа әйткәнсә, тыуған тел тыуған ер менән нык бәйле,



10-2001.p65 77 02.11.01, 15:11



*Яҙыусылар менән осрашыу*

йәғни тыуған тел тыуған ер менән, тыуған ер тыуған тел менән ҡәҙерле. Икеһенә лә берҙәй ҡан тарта, йән тарта.

Сит өлкәләрҙә ғүмер иткән ҡәрҙәштәр менән сағыштырғанда Башҡортостанда йәшәгән башҡорттар күпкә бәхетле. Мәҫәлән, радио, телевидение иртәһен башҡорт телендә уята, көндөҙөн, кисен дә башҡорт йыр-моңо йәнеңде наҙлай, иркәләй, балалар ҙа, йәштәр ҙә,ололар ҙа көн һайын тыуған телендә гәзит уҡый, ял сәғәттәрендә театрға бара... Беҙ быға күнегеп бөткәнбеҙ, ә силәбеләр һәм башҡалар өсөн былар — бары яҡты хыял. Мәшһүр әҙибебеҙ әйтмешләй, әҙәбиәт, мәҙәниәт, сәнғәт яратыусылар ерҙең ҡояшлы яғында йәшәй. Беҙ киләсәктә ҡан ҡәрҙәштәребеҙгә ҡояшлы көндәр, ҡояшлы юлдар һәм күңелдәренең дә ҡояшлы булыуын теләйбеҙ.

Әле рухи мөхиттә ҡояшлы, күңелле көндәрҙең береһе. Рауил Бикбаев илһамланып хәҙистәр, Кәтибә Кинйәбулатова «Аҫылташтар илендә» китабынан тыуған ил, тыуған тел тураһында шиғри гөлләмәләр, Әнисә Таһирова аҡ елкәнле сонеттар, Риф Тойғонов мәҙәк шиғырҙар, Рамазан Шәғәлиев яңы ғына нәшер ителгән «Исемһеҙ йондоҙҙар» йыйынтығынан кинәйәле шәлкемдәр бүләк итә. «Мин осрашыуға килгәнемә, шағирҙарҙы күргәнемә, күңел һүҙҙәрен ишеткәнемә бәхетлемен», — тип, Әлфиә апай Вәлиева бик йылы, хисле итеп, Кәтибә Кинйәбулатованың һәм үҙенең шиғырҙарын уҡыны. Күңелдәр зауыҡланды, тәьҫирләнде. «Саф башҡорт шиғырҙарын, йырҙарын тыңлап, Силәбелә икәнемде лә оноттом. Ошондай саралар күңелгә май яҡҡан кеүек», — тине Флүзә һылыу Ғайсина. Уның һүҙҙәрен раҫлағандай, Силәбе ҡыҙы Фakiһа Сафина ғәжәп моңло итеп, йәндәргә майҙай яғылып йырлап ебәрҙе:

Алдым да ҡәләм, яҙҙым
сәләм
Уң беләккәйем дә
талғансы.
Фани донъя утҡа ла
янһын
Туғандарҙан мәхрүм ҡалғансы.
Урай ҙа урай ат сабырға
Ағиҙелкәй кеүек ер ҡайҙа?
Инде лә һеҙҙе күреү ҡайҙа,
Төштәремдә күрһәм шул файҙа.

— Аралашып йәшәйек, йышыраҡ күрешеп торайыҡ, юлды онотмайыҡ, — тип, Уралдың аҫыл таштарынан эшләнгән бүләктәр, китаптар бирештеләр. Ҡан ҡәрҙәштәре менән осрашыуҙан күңеле тулышып, Кәтибә апай ҙа йырлап эйҙе:

Камзулдарым кейеп, ҡашмау
тағып,
Тәҙрә сиртер инем ҡыҙ булһам...

Силәбелә ата-олатайҙар моңо тынмауы, Хәй Мөхәмәтйәров, Кәтибә Кинйәбулатова, Рамазан Шәғәлиевтарҙың шиғриәт ерлегенән яңы шишмәләр урғылыуы, уларҙың ауаздары йәнгә хуш. «Аҡмулла» әҙәби берекмәһе ҡанатландырған йәш көстәрҙең шиғырҙары, сәсмә әҫәрҙәре Силәбенең «Уралым», «Дуҫлыҡ» гәзиттәрендә, Башҡортостандың матбуғат баҫмаларында сығып тора. Ирек Сабировтың өс китабы нәшер ителгән. Ҡамса Мортазин йыйынтыҡ әҙерләгән. Урал Ҡолошов күңел йылылыһын һалып ижад итә. Арғаяш педучилищеһы, университеттың башҡорт бүлеге талиптары ла шиғриәт менән мауыға. Силәбелә Аҡмулла, Бабичтар рухы йәшәй, «Аҡмулла» әҙәби берекмәһе уңышлы эшләй. Рауил Бикбаев ышаныслы итеп, сәсән теле менән әйткәнсә, беҙ булғанбыҙ, барбыҙ, булырбыҙ.



10-2001.p65 78 02.11.01, 15:11

# БАШЛЫ ЙОРТ УҘЫР

Силәбе өлкәһендә башҡорттар иң күп төпләнеп йәшәгән төйәк — Арғаяш районы. Милли үҙенсәлектәрҙе, йолаларҙы, мәҙәниәтте тергеҙеү ҙә иң тәүҙә бында башлана. Ошо төбәк башҡорттарын тергеҙеү һәм үҫтереү программаһы эшләнә һәм уға ярашлы эш алып барыла. Арғаяш районы мәктәптәрендә туған телдә уҡытыу мәсьәләһе бойомға ашҡан, башҡорт балаларының 93 проценты башҡорт телен өйрәнә. Уҡытыусылар ҙа етерлек. Арғаяшта унынсы йыл инде Силәбеләге 1-се педагогик колледждың филиалы эшләй. Быйыл уны башланғыс синыф уҡытыусыһы шөғөлө менән 27 кеше тамамлаған. Улар башҡорт теле уҡытырға ла хоҡуҡлы. Арғаяштан Күсәғолов Ильмир Мөхәмәтша улының Силәбе өлкәһе башҡорттарының II ҡоролтайында һөйләүенсә, районда башҡорт социаль-педагогик колледжын асырға ниәтләйҙәр.

Һуңғы йылдарҙа Арғаяш районы йәштәре уҡырға, юғары уҡыу йорттарында белем алырға ныҡыраҡ ынтыла. Силәбе өлкәһе, Башҡортостан Республикаһы юғары уҡыу йорттары менән бәйләнеш булдырылған. Арғаяшта Башҡорт дәүләт университетының вәкиллеге бар. Быйыл 49 талип имтихан тапшырған. Улар уҡыу — күңел нуры, уҡыған ил уҙыр икәнен яҡшы аңлай.

Арғаяштар үҙҙәренең район башҡорт халыҡ театры, унын уңыштары менән ғорурлана. Ул — Силәбе өлкәһендә берҙән-бер башҡорт театры. Уның сығыштарын урындағы халыҡ көтөп ала һәм күңел зауығы итеп ҡабул итә. Ауылы башҡаның һыуы башҡа тигәндәй, театр ҡан ҡәрҙәштәрҙең рухын баҙлата, йәшәйешен йәмлерәк, мәғәнәлерәк итә.

Илдәге бәрәкәт башлыҡҡа ныҡ бәйле. Башлыҡ аҡылға бай булһа, халыҡ күңелгә бай була. Арғаяш районы хакимиәтенең яңы башлығы Наумов Сергей Яковлевич, әйтеүҙәренсә, былай башҡорттарға йыйырылмаҫ ҡашлы кеше икән. Уларҙың ихтыяждарына иғтибарлы, милли үҙенсәлектәренә хөрмәт менән ҡарай, аҡһаҡалдар советының фекерҙәрен, тәҡдимдәрен эшендә файҙалана. Аҡһаҡалдар менән түңәрәк өҫтәл ойошторған, социаль-иҡтисади мәсьәләләрҙе хәл итеү буйынса кәңәшләшкән. Ул мәсьәләләр район башҡорттарының II ҡоролтайында ла күтәрелгән. Унда 200 делегат ҡатнашҡан. Быйыл яҙын хакимиәт башлығы мәғариф, мәҙәниәт, юғары уҡыу йорттарына йәштәрҙе уҡырға алыу мәсьәләләре буйынса Өфөлә булған. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты был йәһәттән Арғаяш район хакимиәтенә булышлыҡ, ярҙам күрһәтәсәген белдергән. Арғаяшта ололар шуға ҡыуана: Ҡорбан, Мәүлит байрамдары район хакимиәте ҡатнашлығында һәм уның финанс ярҙамы менән үтә.

Башлыҡ аҡылға бай булһа, халыҡ күңелгә бай тиеүебеҙ йола-байрамдарҙа ла раҫлана. Арғаяш һабантуйында күрше райондарҙың һәм ҡалаларҙың хакимиәт башлыҡтары, өлкә хакимиәте вәкилдәре лә ҡатнашҡан. Халыҡ бындай иғтибарға, хәстәрлеккә риза булған. Халыҡҡа таянған таймай шул.

Арғаяштарға үҙ ере, һыуы, нәҫелнәсәптәре ғәзиз. Йортҡа шатлыҡ килтереп, Усман ауылының 250 йыллығын билдәләгәндәр. Ағас тамырһыҙ, кеше ырыуһыҙ, затһыҙ булмай. Йөҙҙән ашыу ғаилә донъя көткән Усман ауылына меңгә яҡын ҡунаҡ килгән. Ҡунаҡтарҙы ҡаршылап, алты аймаҡ алты тирмә ҡорған, аҙыҡ-түлек, аш-һыу әҙерләгән. Тирмәләргә йорт-каралты, хужалыҡ кәрәк-яраҡтары, хеҙмәт ҡоралдары, өй йыһаздары ҡуйылған. Кейемһалым, биҙәнеү-төҙәнеү әйберҙәре лә күркәм. Йәштәрҙең күҙ алдына ата-олаталарының тарихы, көн-



10-2001.p65 79 02.11.01, 15:11

күреше, йолалары йәнле рәүештә күҙ алдына баҫҡан, байрамдары, һый-хөрмәте, гәҙәттәре, аралашыуҙары үҙе бер күренеш, ғәжәп тамаша булған.

Арғаяштар үҙҙәренең үҙенсәлекле көнкүреше, йәшәйеше менән ғорур. Боронғо сәнғәтең, мәҙәниәтең, ҡабатланмаҫ йөҙөң була тороп, ниңә үҙеңде башҡаларҙан кәм тойорға?.. Халҡыбыҙ аҡыллы, сабыр, теле — яғымлы, йыры — моңло... Икмәк, ит, һөт, йәғни ризыҡ булһа, тормош йәмле икәнен дә аңлайҙар. Арғаяшта район хакимиәте менән берлектә ҡоролтай тарҡалған хужалыҡты тергеҙеү хәстәрлеген күрә. Хеҙмәтсәндәр эш хаҡы ала башлаған, күңелдәрҙә — шатлыҡ, тормош яҡшырырына ышаныс тыуған.

Рух һүнмәһә, ил үлмәй. Тән аҙығы ла, йән аҙығы ла кәрәк. Арғаяштар Силәбе өлкәһе башҡорттары ҡоролтайының яңы Башҡарма комитетының халыҡ мәнфәғәттәрен күберәк ғәмәлгә ашырырына өмөт бағлай. Силәбе башҡорт филармонияһы, театры, музыка училищеһы, мәктәптәре, һәләтле балалар өсөн гимназия асылырына... Ата-олатайҙарыбыҙ быуаттар буйы телен, йыр-моңон һаҡлаған, милли йөҙөн юғалтмаған. Беҙ ҙә заманына күрә ғәмәлдәрен күрәйек, халҡыбыҙҙың ҡотырыҫын арттырайыҡ.

# ЙӘНТӨЙӘК ЙӘНЛӘНӘ

Магнитогорск ҡалаһында әүәләүәлдән бик күп ҡәрҙәштәребеҙ ғүмер итә. Башҡортостандан, айырыуса күрше Әбйәлил, Учалы, Белорет, Баймаҡ райондарынан йәштәр уҡырға, эшкә бара. Сөнки Магнитогорск ере лә — башҡорттарҙың йәнтөйәге. Улар йәнтөйәгендә ысын башҡорт тормошо менән йәшәргә, бәхет-шатлыҡ татырға теләй. Милли уҙаңы уянған ҡәрҙәштәребеҙ быуаттар буйы халыҡты халыҡ иткән асылды һаҡлап ҡалырға тырыша.

Мораҡҡа ирешеү өсөн тиҫтә йыл элек үк милли ойошмалар, башҡорт мәҙәни үҙәге ойошторолған. Әле мәҙәни эштәр менән «Башҡорт сәнғәте йорто» муниципаль үҙәгенең башҡорт бүлеге шөғөлләнә. Етәкселәре Рәхимә Хәкимова, Мәфрүзә Хөсәйенова бер көсөн милли рухты йәнләндереүгә һала.

Милли мәҙәниәттәр муниципаль үҙәгенең башҡорт бүлегендә башҡорт телен өйрәнеү буйынса түңәрәк ойошторолған. Түңәрәккә балалар ҙа, өлөлар ҙа йөрөй. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты өс мең һумлыҡ башҡорт китаптары бүләк иткәс, китапхана булдырғандар. Шулай итеп, башҡортса гәзит-журналдар, китаптар уҡырға мөмкинлек тыуҙырылған. Бүлек ойоштороған «Ҡарлуғас» башҡорт ҡатынҡыҙҙар ансамбле зауыҡлы сығыштары менән тамашасыларҙы илһамландыра. «Ҡарлуғас»та егермеләп «карлуғас» ҡанат ҡаға. Драма түңәрәге, ҡурайсылар ансамбле лә ижади уңыштары менән ҡыуандыра. Быйыл милли көрәш түңәрәге, балалар бейеү ансамбле лә өҫтәлгән. Бейеү ансамбле балаларҙы биш йәштән йәлеп итә. Уларҙың башҡорт сәнғәтен, мәҙәниәтен таныпбелеп үҫеүе, бәләкәйҙән шул мөхиткә ылығыуы мәртәбәне арттыра.

Төрлө мәҙәни саралар ҙа «Башҡорт сәнғәте йорто» муниципаль учреждениеһының иғтибар үҙәгендә. Ул «Әйҙәгеҙ әле, егеттәр!», «Башҡорт һылыуы» кеүек конкурстар, бәйгеләр ойоштора, ҡала һабантуйын, олоғайған кешеләрҙең , һуғыш һәм хеҙмәт ветерандарының ялын үткәреүҙә лә әүҙем ҡатнаша. Ғаилә, әсәлек, бала тәрбиәләү мәсьәләләре лә күңел түрендә. Ҡалалағы «Тимертау» йәштәр ойошмаһы, «Йәшлек», «Салауат» бейеү ансамблдәре лә рух уята, йәшәү йәме тыуҙыра.



10-2001.p65 80 02.11.01, 15:11

Зиһендәргә тәьҫир итеүсе, саф башҡорт телен ишеттереүсе, башҡорт донъяһы менән таныштырыусы «Йәнтөйәк» телевизион программаһы булыу айырыуса әһәмиәтле. Магнитогорск телевидениеһы студияһының башҡорт редакцияһы 1991 йылдың июлендә асылған. Урындағы башҡорт мәҙәни үҙәгенең башлангысы, Башҡортостан етәкселегенең, «Башҡортостан» телерадиокомпанияһының, Әбйәлил районы хакимиәтенең һәм Магнитогорск телестудияһының булышлығы менән. Бына хәҙер ун йыл инде һәр шаршамбыла эфирга башҡорт телендә «Йәнтөйәк» тапшырыуы сыға. Ул Магнитогорск ҡалаһының ғына түгел, Әбйәлил, Учалы, Баймаҡ райондарының, Белорет, Учалы, Сибай ҡалаларының тормошон да яҡтырта. Тапшырыуҙарҙы Силәбе өлкәһенең Ҡыҙыл, Ноғайбәк, Агаповск, Верхнеуральск райондарында йәшәүселәр ҙә ҡарай.

Тапшырыуҙарҙы йөкмәткеле, ҡыҙыҡлы, фәһемле итеүгә журналист Гөлдәр һылыу Хафизова ҙур ижади көс һала. Программаның авторҙары халҡыбыҙҙың үткәне, бөгөнгөһө, булмышы, йәшәйеше, башҡорт ауылдарының хәстәрлектәре, арҙаҡлы шәхестәр, милли үҙенсәлектәр тураһында һөйләп, күрһәтеп, күңелдәрҙе арбай. Магнитогорск радиоһында «Йәнтөйәк» телепрограммаһының филиалы ла эшләй. Силәбе өлкәһе, Магнитогорск ҡалаһы, шулай уҡ Башҡортостан башҡорттарының тормошкөнкүреше, ижтимағи хәле тураһында көн һайын ун-ун биш минут яңылыҡтар тапшырыла. Магнитогорск ҡалаһы мөхите, башҡорттар өсөн был үтә лә мөһим, кәрәкле.

Рухи өлкәлә байтаҡ саралар күрелә, мәгәр күңелде борсоған, эсте бошорған нәмәләр ҙә күп. Башҡорт балаларын башҡортса уҡытыу хәл итеүҙе көткән мәсьәлә. Ҡаланың 54-се мәктәбендә ете йыл эшләгәндән һуң 1999 йылда башҡорт синыфтары бөтөрөлә. Башҡортса уҡытыуҙың баһаһын күтәрмәү, ата-әсәләр менән ныҡышмалы эшләмәү һөҙөмтәһендә синыфтар туплауҙа ҡыйынлыҡ килеп тыуа. Хакимиәт, мәғариф идаралығы хеҙмәткәрҙәре, йәмәғәтселек вәкилдәре менән осрашыуҙар, түңәрәк өҫтәлдәр үткәрелә. Рус синыфтарында ун биш-ун алты ғына уҡыусы иҫәпләнеүгә ҡарамаҫтан, башҡорт синыфтарында уҡыусылар һаны егерме биштән дә кәм булмаҫҡа тейеш тигән шарт ҡуйыла. Бәхәстәрҙән һәм башҡорт теле ике йыл уҡытылмай торғандан һуң 2001 йылда 54-се мәктәптә башҡорт синыфтары яңынан тергеҙелә. Егерме меңдән ашыу башҡорт йәшәгән Магнитогорск ҡалаһында башҡорт балаларын башҡортса уҡытыу көн үҙәгендә ҡала.

Мәҙәниәт өлкәһенә лә әҙәмсә ҡараш, заманса шарттар кәрәк. Башҡорт сәнғәте йорто иҫке ятаҡтың подвалында урынлашҡан. Берләштерелгән ҡала китапханаһының биш мең китабы булған башҡорт-татар әҙәбиәте бүлегенә ҡыҫыҡ ҡына урын бирелгән. Ҡала хакимиәтенең мәҙәниәт идаралығы башҡорт сәнғәте йортон милли мәҙәниәттәрҙең миниципаль үҙәге менән берләштерергә ниәтләй. Башҡорт сәнғәте йортонон ғәмәлдә бөтөрөлөү хәүефе тыуа. Ҡаланың милли советы булышлығы менән был ҡарарҙың яңылышлығын ҡала йыйылышы депутаттарына иҫбатлап, сәнғәт йорто һаҡлап ҡалына. Булам, йәшәйем тиһәң, көрәшмәйенсә, даулашмайынса булмай шул. Ҡала хакимиәте Магнитогорск еренең боронғо башҡорт ере икәнен, ҡаланы, металлургия комбинатын һәм башҡа предприятиеларҙы төҙөүҙә башҡорттарҙың әүҙем ҡатнашыуын, әле лә ең һыҙғанып эшләүен, йәш быуындың киләсәктә бында йәшәйәсәген, ижад итәсәген онотоорға тейеш түгел. Онотала икән, иҫтәренә төшөрөп тороу зарур. Башҡорттарҙың мәнфәғәттәрен ҡыйыу яҡларға, мәғариф, мәҙәниәт мәсьәләләрен бойомға ашырыуҙы талап итергә тулы хоҡуҡ бар. Башҡортостан менән Магнитогорск ҡалаһы араһындағы иҡтисади сауҙа хеҙмәттәшлеге килешеүе анык үтәлгән кеүек, рухи өлкәләге хеҙмәттәшлек тә анык үтәлергә тейеш. Шул саҡта Магнитогорскиҙа йәшәгән милләттәштәребеҙ милли йөҙөн, башҡортлоғон юғалтмаҫ.



10-2001.p65 81 02.11.01, 15:11